# Баһадир Мөхәммәтзәкир олатайҙың ҡомартҡылары, йәки бер фотоһүрәттең тарихы



1882 - 1970

# Эҙләнеү эшенең маҡсаты

- айырым кешеләрҙең яҙмышы аша тыуған яҡ тарихын өйрәнеү,
- матди һәм рухи ҡомартҡыларҙы эҙләп табыу һәм халыҡҡа еткереү.

# Эҙләнеү эшенең актуаллеге

- һуңғы йылдарҙа тарихи сығанаҡ булып хеҙмәт итерҙәй әйберҙәргә, бигерәк тә, боронғо фотоһүрәттәргә иғтибар артты
- боронғо фотоһүрәттәр ваҡиғаларҙы шул миҙгелендә һаҡлап ҡалыуы менән әһәмиәтле һәм тарихты өйрәнеүҙә ярҙамсы сығанаҡ булып тора
- шуға күрә уларҙы эҙләргә, яңыртырға кәрәк

Был Мәскәүҙәге күргәҙмәлә төшкән ҡомартҡы фотоһүрәт. Ваҡыт үтеү менән ул таушалған, йыртылған



# Мөхәммәтзәкир олатай Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә, 1957 йыл. (ул алғы рәттә һулдан икенсе) Фотоһүрәтте яңыртҡандар



# Вəлиев Мөхəммəтзəкир Хəлил улы



- Түбəнге Яйыҡбай ауылында 1882 йылда тыуған. 1900 йылда батша армияһына хеҙмəткə алына, Карпат тауҙарында хеҙмəт итə. 1904-1905 йылдарҙа рус-япон һуғышында, 1914-1916 йылдарҙа Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Һалдат хеҙмəте 17 йылға һуҙыла. 1917 йыл Февраль революцияһынан һуң ғына ҡайта.

- Атаһы менән өс мискә бәшмәк тоҙлап, бер һыйырын һуйып, асығып, шешенеп барған ауылдаштарына ашаталар - шулай итеп, күп кешене үлемдән алып ҡалалар
- Һаҡмарҙың Бикешкә боролған ерендә ҡыуып етеп, Һәҙиә еңгәйҙе багор менән һөйрәп сығарҙы

«Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордены. СССР Юғары Советы Президиумының 1957 йыл 11 ғинуарҙағы 249/36 һанлы Указы



# Мөхәммәтзәкир Хәлил улы Вәлиевтың дәүләт наградалары



“Атайым беҙгә – дүрт ҡыҙына Мәскәүҙән ебәк яулыҡтар, әсәйемә “француз” яулығы алып ҡайтты. Яулыҡҡа “Ленинград” тип яҙып ҡуйылған. Ул ваҡытта яулыҡ иң ҙур бүләк булғандыр. Нык ҡыуандыҡ. Әле минең генә ебәк яулығым, әсәйемдең француз яулығы һаҡланған”.



Мөхәммәтзәкир  олатайҙың ҡыҙҙары Ишбикә менән Хәлимә ataларының ҡомартҡыларын ҡәҙерләп һаҡлайҙар



# Хикмәтле бабай

- Бик хикмәтле лә кеше булған ул Мөхәммәтзәкир олатай. Ейәне Әфтәр олатай һөйләй: “Ҡартатайым империалистик һуғыштан шинель кейеп ҡайта. Шинелен 17 урындан пуля тишеп бөткән, ә үҙе бер тапҡыр ҙа яраланмаған. Ул үҙе лә быға аптырап һөйләгәне хәтерҙә”.
- Харис олатай яҙмаһынан: “Зәкир олатайҙы ҡуйып, баш осона таш ултыртыуға буран да тымды, ел дә юҡ. Бөтәбеҙ ҙә бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та таралыштыҡ”.

- ***ИҒТИБАРЫҒЫҘ ӨСӨН ҘУР РӘХМӘТ!***

# Мөхәммәтзәкир олатай ҡатыны Наҡия инәй менән



Ҡотлоәхмәт Вәлиев, 1939 йылда Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенең бронза миҙалына лайыҡ була



Байрамғолова Зәлифә Ҡотлоәхмәт ҡыҙы,
«Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордены кавалеры



# Мөхәммәтзәкир олатайҙың ҡыҙҙары менән иҫтәлеккә фото

